# МИН НИСЕК БАЙЫЙ ЯҘҘЫМ

– Сәләм, Альбина, килеп сыҡ әле, һиңә бер сюрприз бар! – тип шылтыратты апайымдың танышы. Аптырап ҡалдым. Быға тиклем һаулыҡ һорашыуҙан артыҡ һөйләшмәгән ҡыҙ "сюрприз бар" тип саҡырһынсы әле. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, кисен саҡырылған ергә юлландым. Кем әйтмешләй, саҡырған ергә бар, ҡыуған ерҙән ҡас. Һөйләшелгән сәғәткә барып еттем. Фатирҙа таныш булмаған 5-6 егет һәм ҡыҙ бар, Гөлсөм дә (исемдәр үҙгәртеп алынды), ике туған һеңлеһе Миләүшә лә өйҙә. "Һы, нимәгә саҡырҙы икән былар мине?" тип уйлап, шомланыңҡырап ултырам. Тағы бер егет менән ҡыҙ килгәс, бөтәбеҙгә лә ҙур бүлмәгә сығып ултырырға ҡуштылар. Кем – ултырғыска, кем – диванға, кем комод ситенә урынлаштыҡ.

Бында йыйылғандарҙан 4-5 йәшкә өлкәнерәк ағай алдыбыҙға такта сығарып ҡуйҙы ла, маркер менән төрлө түңәрәктәр һыҙғылап, нимәләр һөйләй башланы. Аңлауым буйынса был байыу юлы булып сыҡты. Бары таныштарыңды алып килергә, сифатлы продукцияны үҙеңә ҡулланырға, һинән алда барғандарҙың һәр аҙымын әҙмә-әҙ ҡабатларға ғына кәрәк икән. Үҙеңдән һуң бер тармаҡ ҡына төҙөп алһаң да, айына 16 мең аҡса эшләйһең, һәм ул һиңә ғүмереңбуйы, аҙаҡ балаларыңа, уларҙың балаларына хеҙмәт итәсәк. Әгәр ике тармаҡ "йәйелдерһәң", был сумма тағы ла артасаҡ. "Дүшәмбеһеҙ, будильникһыҙ, хужаһыҙ, үҙ эшегеҙ менән генә шөғөлләнеп хәлле йәшәргә теләйһегеҙме? Был бизнес һеҙҙең өсөн!" – тине әлеге ағай. Тауарҙары ла шәп икән: яҡшы кремдар, һәйбәт порошок-һабындар, витаминдар. Күҙ алдында тәжрибә үткәрҙеләр: ике банкаға һыу койоп, икеһенә лә әҙерәк "зеленка" тамыҙҙылар, берәүһенә Tide порошогын тондорҙолар, икенсеһенә семтеп кенә үҙҙәренекен һалдылар. Ҡалаҡ менән болғата торғас, тәүгеһе таша яҙып күпереп сыкты, әммә һаман да йәшел килеш ҡалды, икенсеһе үтә күренмәлегә әйләнде.

"О, шәп, әлбиттә! Селтәргә ҡушылыу өсөн 150 һум ғына ла етә! Ҡайҙа китмәгән ул аҡса, эшләп ҡарайым әле. Ваҡыт барыбер үтә бит" тип уйланым. Аңлағанһығыҙҙыр, был – селтәр маркетингы ине. Икенсе көн тағы барып маркетинг планын тыңлап ҡайттым, өсөнсө тапҡырында дуҫтарымды ла эйәрттем. Бындағы төп эш схемаһы – маркетинг семинарҙарына йөрөү, мотлаҡ тауарҙарҙы үҙең ҡулланыу һәм дуҫтарыңды ошо юлға ылыҡтырыу. Кешеләргә аңлатҡанда кәтғи өгөтләү бу-



лырға тейеш түгел. Эшләргә теләйме, юкмы – үҙе хәл итә, һинең төп бурыс – мәғлүмәт биреү.

Шулай кис һайын осрашыуҙар үткәрә башланык, маркетинг пландарын һөйләйбеҙ, тыңлайбыҙ, хыялланабыҙ. Тауарҙары ысынлап та насар түгел, сифатлы, оҙакка етә торған булып сыкты. Хактары, әлбиттә, киммәтерәк ине, шулай ҙа бер һатып алһаң, арзан хак торғандарынан 3-4 тапкырға оҙағырак хеҙмәт итә. "Сифатһыҙ һәм осһоҙ әйбер кулланырға мин үтә бай түгел" тип әйткән береү. Берҙе киммәткә, әммә якшыны ала ла, оҙак кулланғас, арзанырakka төшә инде. Дуҫтарым менән тиҙҙән байыясағыбыҙҙы уйлап хыяллана башланык: йәшәргә теләгән фатирҙарҙың һүрәттәрен кыркып алып, өҫтөнә фотоларыбыҙҙы йәбештереп куйҙык. Машиналар янына ла үҙебеҙҙе "беркеттек".

Шулай "эшем эйәләре"нә әйләнеп киттек. Китаптар укыйбыҙ, акыллы һүҙҙәрҙе күсереп алабыҙ. Ярты йыл самаһы йүгерҙем мин. Ярайһы ғына ҙур бер тармак та үҫте, ләкин студенттарҙың күпләп тауар алып балл йыйырлык артык аксаһы кайҙан булһын инде! Үҙем студент булғас, тармағым да шул айрәнән.

Алты ай буйы бер урында тапанғас, аксаның бер касан да буш, еңел килмәгәненә йәнә бер инандым. Аңланым һәм ташланым. "Кемдер ошо ысул менән байыған. Һин дә уның артынан эҙмәэҙ барһаң – байыясакһың" принцибы эшкә ашманы. Ә бер акыл эйәһе әйтмешләй, "Кемдеңдер эшләгәнен кабатлау – 100 процент уңышһыҙлыкка килтерә" икән. Минең менән бергә башлаған һәм әле лә селтәр маркетингында йөрөгән дуҫтарым, таныштарым бар. "Сереп байынылар" тип әйтмәһәм дә, был эштән килем ала башланылар инде. Һаман алдарына максат куйып йәшәйҙәр.

Селтәр маркетингы миңә нимә бирҙе?

Тәү сиратта алдыма максат куйып йәшәргә, хыялыма ынтылырға, һәр аҙымымды планлаштырып башкарырға өйрәтте. Уларҙың иһә миңә күп тапкырҙар кәрәге тейҙе, һәм тейәсәк әле. Икенсенән, кеше менән аралашырға өйрәндем. Селтәр маркетингында эшләгән осоромда укыған китаптар кеше психологияһын өйрәнергә, кыйыу булырға ярҙам итте. Мәҫәлән, бер касан да "Юкмы?" тип һорарға ярамай икән. "Һеҙҙә бармы?" тип мөрәжәғәт итергә кәрәк. "Юкмы?" тигәнгә "Юк" тип яуап биреүе еңел, ә ыңғай һорауға күп осракта шундай ук яуап алынасак. Шул мәлдәге яҙмаларымды укып ултырам: "Уңыш – ул бөтәһенә лә өлгөрөү" (Успех – "успеть" тигәндән алынған). Ысынлап та шулай бит. Көндәлек эшеңдә вакыт арбаһынан төшөп калмай өлгөрөп башкарһаң, максатыңа барып етәһең.

"Беҙҙең бурыс – эҙләү, ә һәр кешенән миллионер яһарға тырышыу түгел".

"Был бизнесты тик башкаларға якшылык теләгәндәр генә төҙәй ала".

"Кеше мактағанды ярата, һәр кемдең мактарлык сифаты була, һин шуны күрә белергә тейешһең!"

"5 йыл. Әгәр ошо йыл эсендә тормошоғоҙҙа ыңғай якка үҙгәрештәр юк икән, йүнәлеште үҙгәртергә кәрәк!"

"Бәхетле булыуҙан куркмағыҙ!"

"Миңә һуң инде, тимәгеҙ, күңелдә һырҙар булмай".

"Әгәр куркмаһаң, һин нимәләр эшләр инең?"

"Ысынында тормошто иртәгә үҙгәртеп булмай, уны бөгөн үҙгәртергә кәрәк!"

Тағы бер якшы яғы – буш вакытты үткәреүгә шөғөл. Атай-әсәй йортонан айырылып сығып, калаға килгән кисәге укыусыларҙың буш вакыты муйындан, әммә күптәр уны дөрөҫ файҙалана белмәй.

Мәкәләне укығас, күптәр "селтәр маркетингына реклама яһаны" тип тәнкитләр. Әммә 6 ай эсендә акса эшләй алмаһам да, якшырак тормошка ынтылыш һабактары алдым. Мәктәптә 11 йыл буйы төрлө фәндәр укыһак та, улар онотола. "Ниңә балаларға аҙнаһына бер сәғәт булһа ла "Нисек етеш йәшәргә?" тигән дәрестәр индермәҫкә?" тип уйлап куйғайным шул сак. Нисек эшкыуар булырға өйрәтһендәр ине. Синтаксис, синус, косинустар артабан шул йүнәлештә укыһаң ғына кәрәк, ә хәләл юл менән акса эшләү ысулдарының, кешеләр менән аралашыуҙың ғүмер буйы, көн һайын кәрәге тейә.

***Альбина САДЫКОВА.***

**"Бөркөт балаһы йорт өйрәктәре менән бергә үҫкән, ти. Улар менән бергә баҡылдаған, йәшәгән. Ләкин йыш ҡына күккә ҡарап осорға самалаған. Ә өйрәктәр: "Хыялланма ла, беҙ оса белмәйбеҙ", – тип тыя килгәндәр. Ваҡыт үткән, ҡоштар ҡартайған. Бөркөт тә үҙенең осар ҡош икәнен белмәйенсә үлеп киткән, ти..."**

